BN_98_22_05_2015_11_Макет 1 21.05.2015 16:28 Страница 1

Көн һайын ОШО урында

ИМАН ҒЫНА БЕҘГӘ ҠЕҮӘТ ӨҪТӘР, ИМАН ҒЫНА АСЫР ЙӨРӘКТЕ!

Был сәфәремә юл һис уйламағанда асылды. Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм тоҡомонан Наҡшбәндиә тәриҡәтенең алтын сылбырын дауам иткән Шәйех Мәхмәт Әҙил ән – Наҡшбәнди Башҡортостанға өсөнсө тапҡыр килеүенә ҡарамаҫтан, бығаса күрешергә насип булмағайны. Әммә “Урал батыр” эпосы китабын бүләк иткән кешеләр Кипрҙа йәшәп, хәҙер инде мәңгелеккә күскән Солтан Әүлиә Мәүләнә Шәйех Мөхәммәт Нәҙим әл-Хаҡҡаниҙың тулҡынланыу менән: “Сөбханалла, машаллаһ, Нәбиулла! Халҡығыҙ үҙенә Аллаһы Тәғәлә ебәргән пәйғәмбәрен онотмаған”, — тигән һүҙҙәре күңел түренә үтеп ингәйне. Нәби – тимәк, Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмгә тиклем йәшәгән пәйғәмбәр. Урал ғәләйһис-сәләм, тип әйткән кешеләр ҙә бар Урал батыр тураһында. Пәйғәмбәрҙәрҙән китап ҡала: яҡшылыҡты һәм яҡтылыҡты васыят иткән Урал атабыҙ халҡына башҡорт телендәге “Урал батыр” эпосын ҡалдырған.

Күрәһең, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. Быйылғы осрашыуҙарын Шәйех Мәхмәт әфәнде Татарстандан башланы, шуға ла Ҡазанға юлландым.



Сәфәр башы, бул фекерем юлдашы

Ара әллә ни алыҫ та, яҡын да түгел һымаҡ, әммә юл буйына сәфәрҙәшем, Ҡариҙел егете Робертҡа нәҫел тамырҙары, Һөйәнтүҫ фажиғәһе тураһында һөйләп бара торғас, Минзәләгә килеп еткәнде лә һиҙмәй ҡалғанмын. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигән бит халҡыбыҙ: бик ауыр замандарҙа 100-ҙән ашыу башҡорт ауылының яндырылыуы, Асҡын яғындағы ҡаяларға һеңгән рәнйеш һаман да быуаттар аша ҡолаҡҡа салынғандай. Тарихи ваҡиғаларҙы белеү әрнеп иҫкә алыу өсөн түгел, ә һығымта яһап, шул уҡ тырмаға баҫмаҫ өсөн кәрәк тә бит.

Минзәләгә тыныс ҡына ҡарай алмайым. Был яҡтар миңә шәжәрәм тамырҙарының Әлмәт, Минзәлә ерҙәренә барып тоташыуы менән дә ҡеҙерле. Шәжәрәне халыҡҡа ҡайтарған билдәле тарихсы Әнүәр ағай Әсфәндиәров төҙөгән нәҫел ағасым ошо яҡтарҙан таралған. Элегерәк тә булған бар ине был яҡтарҙа, хәҙер һәр ағас, таш башҡа төрлө күренә. Үҫәк бейҙән киткән тармағым бөгөнгө Башҡортостан ерендә лә таралған.

Мең бәләле таш зинданлы ҡала,
Бар икән дә һинең үҙ йөнең.
Һин бит үҙең үтеп барған саҡта
Илай-илай тарих һөйләнең.

Уйһыуҙарға бында күҙ-йәш тулған,
Йылға үҙәненән ҡан аҡҡан.
Беҙ ғәйепле түгел, тигән кеүек
Һыҡтап ҡаршылайҙар йыраҡтан.

Һеҙ ғәйепһеҙ, һеҙгә һорау ҙа юҡ,
Бында әжәл үҙе һаташҡан.
Ватанына тоғро Алдар йәне
Батыр булып Күккә олғашҡан.

Эйе, тап ошо ҡалала ҡабырғаһынан аҫып ҡуялар Алдар Иҫәкәевте. Доға ҡылдым ҡиблаларға ҡарап, рәнйемәһен йәне батырҙың!

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа апрель аҙағында үләндә ялан аяҡ йүгереп йөрөй торғайныҡ, ә быйылғы яҙ, иртә башланһа ла, оҙаҡҡа һуҙылды. Йылы яҡтан яҡтылыҡ алып килгәндәй булды Шәйех әфәнде, Ҡазанда көндәр бик матур торҙо. Ҡапыл йылытҡанға аптырашып ҡалған халыҡ курткаларын, итектәрен сисмәгәйне әле. Ә йәштәр инде, ошо миҙгелде генә көткәндәй, ялан өҫ, сәстәрен елгә елберҙәтеп, йәйге аяҡ кейемендә урам ҡыҙыра, ҡайҙалыр ашыға.

Ҡазан, Болғар йөҙө таң ҡалдырамы?

Мин Ҡазанға килеп еткәнсе, Шәйех Мәхмәт Татарстан Диниә назаратында осрашыуҙар үткәреп, Рәсәй Ислам университетында студенттар менән аралашып та өлгергәйне инде. Күренекле шәхестәр, хандар ерләнгән зыяратҡа инеп, доға уҡығандар. Данлыҡлы Ҡолшәриф мәсетендә лә урындағы дин әһелдәре менән аралашҡандар. Был ғибәҙәтхана – Ҡазандың үҙәк урындарының береһе, тип әйтһәм, моғайын, хата булмаҫ. Дини атрибутика, китаптар һатыла, һәр стенд зауыҡлы биҙәп эшләнгән.

Ошо уҡ күренеш ҡала урамдарында ла күҙгә ташлана. Метро – үҙе бер милли нағыш өлгөһө. Мәшһүр Ғабдулла Туҡай станцияһында уның әҫәрҙәренең геройҙары ҡаршы алып тора. Был хаҡта бер мәҡәләмдә әйтеп киткәйнем булһа кәрәк, яңынан иҫкә төшөрәм. Хатта ҡайҙалыр тальян тауышы яңғырап киткәндәй булды. Әллә Шүрәлегә Былтыр көй уйнаймы тиһәм, ысынлап та, бер бабай тальян тотоп килә, имеш. Былар хаҡында ентекләп һөйләүем бушҡа түгел. Ҡайһы тарафына баҡһам да, татар ҡөрҙәштәрҙең милли атрибутикаһының ҡаршы алыуы – хуплауға лайыҡ күренеш. Афарин, заманса Ҡазан!

Әйткәндәй, Татарстанға сәфәр республика президенты вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Рөстәм Миңлехановтың рәсми саҡырыуы буйынса ойошторолоған. Мәсеттәр бик күп Ҡазанда. Ҡабан күле буйында ғына бер нисәһе урынлашҡан. Апанай мәсетендә Шәйех Мәхмәт әфәнде күмәк халыҡ менән бергә

Кипрҙан килгән Шәйех Мәхмәт әфәнде Татарстан мөфтиәтендә.

намаҙ уҡыны, сөбхәт әйтте. Бер сәғәткә яҡын барған әңгәмә барышында бик ҡыҙыҡлы фекерҙәр яңғыраны. “Беҙҙә XIX быуатта уҡ 30 меңдән ашыу китап сығҡан, уҡымышлылар бихисап булған. Быға ҡарашығыҙ нисек?” тигән һорауға Шәйех Мәхмәт әфәнде былай тип яуап бирҙе: “Эйе, китаптар ҙа, уҡыған кешеләр ҙә байтаҡ, әммә уларҙың күбеһе дөрөҫ мәғлүмәт еткермәй. Эсендә иман юҡ”.

Татарстанда тәриҡәт яйлап тарала, эйе, ҡаршы тороусылар ҙа булған. Иң ғәжәпләндергәне шул: һәр мәсеттең йәйәш имамдары, хәҙрәттәр тәриҡәт юлын һайлаған. Был хаҡта Рәсәй ислам университеты етәкселеге лә асыҡтан-асыҡ әйтә һәм бер тауыштан Волга – Урал буйы традицион Ислам нигеҙендә тәриҡәтте һайлауы хаҡында халыҡҡа еткерә.

Хәҙер төрлө фекер еткергән әсбаптар, брошюралар күпләп сығарыла. Улар быуаттар буйы иманынан яҙҙырылған халыҡтың күҙен томалай, дөрөҫ юлдан этәрә, шуға күрә дин әһелдәренең йәш быуындың ғына түгел, тотош йәмғиәттең йөрәгенә иман нуры сәсеүе мөһим. Муллалар мәсеттәрҙә, дини байрамдарҙа ғына түгел, ә көндәлек тормошта аралашып, һәр саҡ кеше араһында йөрөп, Аллаһы Тәғәләнең берлеге һәм барлығы хаҡында халыҡҡа дөрөҫ мәғлүмәт еткерергә бурыслы.

XIX быуат аҙағында тыуған Ғарифулла ишандың ҡыҙы Зөбәржәт ханым мәсеттә атаһының дин юлында үткән ғүмере хаҡында һөйләне. Ошонда уҡ барса халыҡ тағы ла намаҙ уҡығандан һуң, шәйех Мәхмәт әфәнде бәйғәт таратты. Бәйғәт – ул Аллаһы Тәғәләгә ант. Мәсеттә халыҡ әллә ни күп булманы: Башҡортостандан килгән рәсми ҡунаҡтар һәм Татарстандан егермеләп кеше. Ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, ир-ат та бында өҫ-башына, тышҡы ҡиәфәтенә ҙур иғтибар бүлә. Гүзәл зат төрөктәргә тартым итеп кейенә, әммә ялтырауыҡ биҙәүестәр менән мауыға. Бындай күлдәктәрҙең, яулыҡтарҙың хаҡы

Ҡазан метроһында Туҡай геройҙары.

> “БАШҠОРТОСТАН СӨБХӘТТӘРЕ” КИТАБЫНДА ШУНДАЙ ФЕКЕР ҘӘ ТАПТЫМ: “ШӘЙЕХ ӘФӘНДЕ ҺЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠТЫ ЯРАТА, СӨНКИ БАШҠОРТТО АЛЛАҺ ҺӨЙӘ”.

ла иҫ киткестер инде, тип ҡараным.

Беҙ, сәфәрҙәштәр, Наҡшбәнди тәриҡәтенең алтын сылбырының 40-сы вәкиле Нәҙим Хаҡҡаниҙың мөрите булған Фатима Камаловаға юлландыҡ. Ҡатын-ҡыҙ – бер йортта, ир-егет – икенсеһендә.

Йәштәһенә “Әнейҙәр” мәсете янында йыйылдыҡ. Рәсәй Ислам университетында шулай уҡ төрлө дини форумдар бара ине. Татарстан Диниә назараты рәйесе мөфтәй Камил Сәмиғуллин, Кипрҙан килгән Шәйех Мәхмәт әфәнде менән осрашып, бүләген тапшырҙы.

Боронғо Болғар иленә сәйәхәт ҡылыр алдынан Ҡазан эргәһендә төҙөлөп ятҡан дөрғәгә инеп сыҡтыҡ. Ул һүҙ миңә таныш түгел. Был хаҡта Башҡортостандан килгән хәҙрәттәрҙән һорашам. Дәрғә – ул мәсете, үҙенең хужалығы, мәҙрәсәһе булған иман йорто. Яңы төҙөлә башлаған был бинала киләсәктә иман юлында йөрөгәндәр үҙҙәре ғибәҙәт ҡылыусыларҙы ҡабул итәсәк, уларҙың йәшәйешен тәьмин итеү менән шөғөлләнәсәк. Сығып барған саҡта Шәйех менән иҫәнләшеп, әңгәмә тураһында һөйләшәйем тип ҡул һуҙам (әммә хәҙрәттәр бының бигүк яраған эш түгеллеген әйтте), их, шул ҡайһы бер дини ҡағиҙәләрҙе белеп бөтмәүем! Шәйех Мәхмәт әфәнде яуап итеп ҡулын һуҙҙы, йылы итеп күреште. Ихласлыҡ өҫтөн мосолман өсөн.

Универсиадаға ентекле әҙерләнгән Татарстандың юлдары ялтырап ята. Тын алырға ла өлгөрмәнек, Болғарға килеп тә еттек. Ундағы мәсеттең зауыҡ менән төҙөлөүе тураһында бер нисә һүҙ менән генә әйтеп бөтөрөп булмай. Һиндостандың Тадж Махалы стилендә ҡоролған ғибәҙәтхана әллә ҡайҙан балҡып ҡаршы алды. Унда ла халыҡ әллә ни күп булманы. Аңлауымса, халыҡ иленә олуғ шәйех килгәнен аңлап та бөтмәгәндер. Иҙел буйында урынлашҡан өс ҡатлы ер аҫты музейы йыһаздары, биҙәлеше менән таң ҡалдырҙы. Боронғо ҡалалар картаһы, ҡаҙылма байлыҡтар, хәрби кейемдәр, халыҡтың йәшәйеше хаҡында бик бай мәғлүмәт тупланған бында. Әммә шуныһы ғына эсте бошорҙо: уларҙың күҙгә салынғандары ғына ла ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Хатта диңгеҙ исемдәре лә хаталы яҙылған, күрше йәшәгән башҡорт халҡы, башҡорт ҡалалары тураһында һис бер ерҙә бөртөк тә һүҙ юҡ. Был бит – тарихи хата. Шундай күркәм залдарҙың, заманса төҙөлгән музейҙың, лифт, эскалатор менән тәьмин ителгән бинаның йөкмәткеһе булмай сыға түгелме? Боронғо дәүерҙәрҙе сағылдырған карталарҙа ни сәбәпле башҡа дәүләттәр күрһәтелмәгән икән? Анау хәтлем ғалимы булған республиканың тарихи мәғлүмәттәрҙе төүәл тупларға мөмкинлеге булмауына ышаныуы ла ҡыйын. Тыштан ялтырап торған Болғарҙан тәрән хафаланыу менән сыҡтым.

Шәйех менән әңгәмә

Солтан Әүлиә Мәүләнә Шәйех Мөхәммәт Нәҙим әл-Хаҡҡаниҙың, йәғни беҙ күрешкән Шәйех Мәхмәт әфәнденең атаһы башҡорттар хаҡында бик ҡыҙыҡлы, йөрәккә майҙай булып яғылырҙай фекерҙәр әйткәнен ишеткәнем дә, уҡығаным да бар. Ул берәй ерҙә башҡортто, татарҙы күрһә, бик ҡыуана. “Мин – һеҙҙең еҙнәгеҙ”, – ти икән башҡорттарға, беҙҙең халыҡты ихтирам итә. Бының үҙенә күрә хикмәте бар. Ниндәй хикмәт һуң ул? Аллаһ кемде лә булһа дөрөҫ юлға баҫтырһа, был — ҙур бүләк. “Башҡортостан сөбхәттәре” китабында шундай фекер ҙә таптым: “Шәйех әфәнде һеҙҙең халыҡты ярата, сөнки башҡортто Аллаһ һөйә. Нарыҫтауҙағы изге зыяратта ятҡан бөйөктәр – бының иң ҙур дәлиле. Аллаһ сәхәбәләрҙе һеҙҙең илгә тиклем ебәргән, һәм улар Аллаһ ярҙамында Исламдың башланған мәлендә үк һеҙҙең халыҡты дингә, иманға баҫтырған. Төркиҙәр араһында беренсе булып мосолманлыҡты башҡорттар ҡабул иткән. Тимәк, ул халыҡ — Аллаһтың яратҡан ҡоло, шуның өсөн дә Шәйех Мәүләнә Солтан башҡорттар менән күрешһә, бик ҡыуана, бик ҡәнәғәт була”.

Еҙнәгеҙ тигәнгә, бер аҙ алға китеп, аңлатма биреп китәм. Шәйех Нәҙим Хаҡҡаниҙың ҡатыны Әминә инәй – сығышы менән боронғо башҡорт еренән, йәғни, Ырымбур өлкәһенең Баҡай ауылынан. Ул яҡты ла барып күрергә яҙҙы беҙгә.

Әлегә Болғар ерендә ойошторолоған әңгәмәгә рәхим итегеҙ!

— Хөрмәтле Шәйех Мәхмәт әфәнде, бөгөнгө Ислам хаҡында нимә әйтер инегеҙ?

– Исламдың бөгөнгөһө, кисәгеһе юҡ. Ул – Аллаһ Тәғәлә тарафынан еребеҙгә ебәрелгән иман юлы. Уны халыҡҡа пәйғәмбәрҙәр, сәхәбәләр, бөгөн шәйехтәр еткерә. Эйе, күптәр динебеҙ хаҡында төрлө фекер уятырға тырыша. Ислам кешегә тыуғандан алып һуңғы юлына тиклем был донъяла дөрөҫ йәшәү ғәмәлен күрһәтә. Бында бер ниндәй велосипед уйлап сығарыу ҙа кәрәкмәй. Барыһы ла күптән изге “Көръән” китабында яҙылған. Бүленештәр инә динде, халыҡта иманды ҡаҡшатыу маҡсатында махсус эшләнә.

Лариса АБДУЛЛИНА.

Өфө – Ҡазан – Өфө.

(Дауамы бар).